82.3(2)
Н 17
СА-349865

Фәнүзә Нәзершина

# РИУӘЙӘТ ҺӘМ ЛЕГЕНДАЛАРҘА – ХАЛЫҠ ТАРИХЫ



Фәнүзә Нәзершина

# РИУӘЙӘТ ҺӘМ ЛЕГЕНДАЛАРҘА – ХАЛЫҠ ТАРИХЫ

Государственное бюджетное
учреждение культуры
«Оренбургская областная универсальная
научная библиотека им. Н.К. Крупской»

Зәйнәб Биишева исемендәге "КИТАП" нәшриәте

ӨФӨ·2011

## ИНЕШ

Һәр халыҡтың ижадында кешелектең тарихи хәтерен мәңгеләштергән һәм шуның менән ифрат ҙур әһәмиәткә эйә булған жанрҙар бар. Риүәйәт, легенда һәм уларға яҡын башҡа хикәйәләр тап ана шундайҙарҙан. Бындай хикәйәләрҙең ижтимағи вазифаһы халыҡтың үҙе тарафынан ғәжәп тапҡыр рәүештә «тарих» тигән тәрән мәғәнәле атама менән әйтеп бирелгән. Фольклористикала уларға ҡарата йыш ҡына «тарихи проза» тигән термин ҡулланыла. Әлбиттә, был тиккә генә түгел: риүәйәт, легендаларҙың жанр тәбиғәте махсус рәүештә күренештәрҙең, хәл-ваҡиғаларҙың килеп сығышын анлатыуға, мәғлүмәт тапшырыуға, тарих һөйләүгә нигеҙләнгән. «Донъя ҡайһылай яралған? Ҡояш ниңә юғары? Айҙағы таптар нимәнән килә?.. Ата-бабаларыбыҙ, беҙ үҙебеҙ кемдәр? Тәүтөйәгебеҙ ҡайҙа?» — ошондайыраҡ күп һанлы һорауҙарға яуап биреү бурысын үҙ өҫтөнә алған хикмәтле хикәйәләр ул легендалар һәм риүәйәттәр. Шуға ла уларҙы белеү йола талаптары рәтенә индерелгән боронғо ата-бабаларыбыҙ тарафынан. Был хаҡта М. В. Лоссиевский бына ни тип яҙып ҡалдырған: «Элек-электән төплө урынлашҡан йола буйынса, башҡорт бөтәһенән дә элек өс нәмәне яҡшы белергә тейеш. Шуның береһе — үҙ ырыуыңдың шәжәрәһен, тарихын белеү, икенсеһе — йондоҙҙарҙың «серенә» төшөнөү һәм уларға ҡарап эш итә белеү, өсөнсөһө — халыҡ риүәйәттәрен, йырҙарын белеү» (174, 275—276). Ысынлап та, риүәйәт һәм легендаларҙың танып белеү әһәмиәте баһалап бөтөргөһөҙ. Легендаларҙы, риүәйәттәрҙе һәм улар системаһына ингән башҡа төр хикәйәләрҙе бергә туплап, тәртипкә һалып, төркөмләп ҡараһаң, күп планлы һәм бик тәрән йөкмәткеле, киң эпик ҡоласлы әҫәр күҙ алдына баҫа. Уны ғилми яҡтан ентекле өйрәнеү — халыҡ тарихының төрлө дәүерҙәрен байҡау ул. Бындай эш хатта архаик осорҙоң ҡайһы бер һыҙаттарын төҫмөрләргә, халыҡтың тарихи ҡараштарын билдәләргә форсат бирә.

Үҙенсәлекле һүҙ сәнғәте әҫәрҙәре булараҡ, халыҡтың фекерләү кимәлен, эстетик ҡараштарын сағылдырыу йәһәтенән дә риүәйәт, легендалар әһәмиәтле сығанаҡ булып тора. Хәҙерге осорҙа, бер яҡтан, рухи битарафлыҡҡа әйҙәү, икенсе яҡтан, уға ҡаршы тороу рәүешендә халыҡтың үҙ тарихын, үҙ булмышын белеүгә ынтылышы көсәйә

башлаған шарттарҙа, ата-бабаларҙың тарихи хәтеренә, уларҙың мәҙәни мираҫына иғтибарҙы йүнәлтеүҙең мәғәнәһе айырыуса оло. Тик был мираҫҡа ғилми, тарихи күҙлектән ҡарай белеү, объектив баһа биреү шарт.

Фольклор прозаһының үҙенсәлекле бер тармағын өйрәнеүҙең көнүҙәк бурыстар иҫәбенә инеүе шул тармаҡҡа ҡараған жанрҙар тәбиғәтен ғилми-теоретик яҡтан тикшереү ихтыяжынан да килә. Был тәңгәлдә башҡорт фольклористикаһында байтаҡ ҡына эштәр башҡарылған (ул хаҡта артабан һүҙ буласаҡ), әммә тикшереләһе проблемалар ҙа аҙ түгел әле.

Улар иҫәбенә тарихи прозаның жанрҙар составын аныҡлау, риүәйәт, легенда, хөрәфәти хикәйә, хәтирә жанрҙарының тәбиғәтен асып биреү, был жанрҙарҙың үҙ-ара һәм башҡа жанрҙар менән бәйләнеш мәсьәләләрен яҡтыртыу, шул бәйләнештәр нигеҙендә хасил булған жанр төрҙәренең тәбиғәтен һәм боронғо тамырҙарын юллау кеүек мәсьәләләр инә.

Халыҡ хикәйәләрен сюжеттары буйынса төркөмләү, легенда, риүәйәт һәм уларға яҡын башҡа төр хикәйәләрҙең ысынбарлыҡты сағылдырыу рәүешен, йәғни тарихи ерлектәрен өйрәнеү ҙә зарур. Был инде тарихи ҡараш талап иткән ифрат ҡатмарлы мәсьәлә, ул материалды үҙ ерлегендә генә түгел, ә бәлки, башҡа бик күп халыҡтарҙың ижады менән бәйләнештә ҡарап, үҙенсәлекле һәм уртаҡ, дөйөм күренештәрҙе асыҡлауҙы һорай.

В. Я. Пропп, П. Г. Богатырев, К. В. Чистов, Б. Н. Путилов, С. Н. Азбелев, В. М. Гацак, В. П. Аникин, Е. М. Мелетинский, И. Н. Кравцов кеүек ғалимдарҙың дөйөм теоретик һәм методологик характерҙағы хеҙмәттәре, В. К. Соколова, Э. В. Померанцева, Х. Г. Короглы, С. А. Каскабасовтарҙың фольклор прозаһының айырым тармаҡтарына бағышланған эштәре ҙур әһәмиәткә эйә («Библиография»ны ҡарағыҙ). Тикшереүҙә ҡайһы бер алыҫ сит ил ғалимдарының хеҙмәттәренә мөрәжәғәт итеү ҙә кәрәк булды.

Әлбиттә, иң мөһим сығанаҡ хеҙмәтен күп йылдар буйы тупланған фактик материалдар һәм башҡорт фольклор ғилеме өлкәһендәге тикшеренеүҙәр үтәне.

Материалдар төрлө. Уларҙың бер төркөмө саф фольклор яҙмаларынан торһа, икенселәре шәжәрәләр, тарихи-этнографик әҙәбиәт эсендә авторҙарҙың теге йәки был фекерен дәлилләү өсөн ҡулланылған ҡыҫҡа сюжеттарҙан ғибәрәт.

* * *

Башҡорт легендалары һәм хөрәфәти хикәйәләре хаҡындағы тәүге мәғлүмәттәр X быуатҡа ҡайтып ҡала. 922 йылда башҡорттар араһында булып киткән ғәрәп хәлифәлеге илсеһе Әхмәт Ибн-Фаҙлан яҙмаларында башҡорттарҙың мәжүси ышаныуҙары хаҡында ифрат ҡиммәтле мәғлүмәттәр бар. Боронғо башҡорт ҡәбиләләренең ҡоштарға

табыныуын дәлилләү ниәтендә, сәйәхәтсе атаҡлы «Сыңрау торна» легендаһының ҡыҫҡаса йөкмәткеһен килтерә (139, 131[1]).

Риүәйәт һәм легендаларҙың үрнәктәрен урта быуаттарҙың үҙенсәлекле әҙәби тарихи ҡомартҡылары булған шәжәрәләрҙә осратырға мөмкин. Революцияға тиклем башҡорт халҡының тарихы һәм мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһынған ҡайһы бер ғалимдар (М. Лоссиевский, П. Назаров, В. Юматов) хатта шәжәрәләрҙең үҙҙәрен «риүәйәт», «хроника», «тарихи яҙма» тип атаған (174, 368–385; 200, 54, 84; 336, 45–48). Башҡорт шәжәрәләрен ентекләп өйрәнгән тарихсы-этнограф Р. Ғ. Кузеев та генеалогия йылъяҙмаларында риүәйәт һәм легендаларҙың йыш осрауын билдәләй һәм уларға таяна (41, 9, 178, 185, 187). Ысынлап та, шәжәрәләрҙәге исемдәр теҙмәһе теге йәки был ырыу башлығы заманында булып үткән тарихи ваҡиғаларҙы, ҡәбиләырыу тормошон ҡушып һөйләү, уларға бәйле рәүештә халыҡ телендә йөрөгән төрлө риүәйәт, легендаларҙы иҫкә алыуҙар менән аралашып киткеләгән. «Башҡорт шәжәрәләре» китабына ингән шәжәрәләрҙең күпселеге нәҡ бына шундай ысулға ҡоролған. XVI быуатта яҙыла башлаған Юрматы ырыуы шәжәрәһе, мәҫәлән, туранан-тура мифологик легенданан башлана: «Борын заманда бу ердә нуғай ирде. Зәй, Шишмә дигән ерләрдә һәр тарафдан күчеп йөрөрләр ирде. Анча нәгаһ ул ердә аждаһа йылан бәйдә булды. Бер ничә көнлек ердән ятар ирде. Мыңар куб йыллар кичде, анық берлән орыш ҡылдылар. Куб хәлайыҡ һәлак булды. Шунан соң ул йылын ғәйеб булды. Хәлайыҡ оманда ҡалды...» Ошо шәжәрәгә ингән әүлиә ҡәбере хаҡындағы хикәйәләү ҙә боронғо дини мифологик легендаларға барып тоташа. Шәжәрәнең юрматылар тарихына ҡағылған төп өлөшө иһә халыҡ телендә йөрөй торған тарихи риүәйәттәргә бик яҡын тора (41, 27–28).

Ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһе «Бабсаҡ менән Күсәк бей» исемле эпик ҡомартҡы йөкмәткеһен риүәйәт формаһында теркәп ҡалдырыуы менән иғтибарҙы йәлеп итә (41, 110–111).

Ҡайһы бер шәжәрәләргә, хатта төрки телендә һөйләшеүсе күп кенә халыҡтарға билдәле булған легендаларҙың өҙөктәре, йәғни дөйөм төрки сюжеттар (әйтәйек, төрки халыҡтарының сығышы хаҡындағы риүәйәт һәм легендалар) килеп инә (41, 93).

Ҡыҫҡаһы, шәжәрәләрҙе (бында исемдәр теҙмәһенән генә торған текстар иҫәпкә алынмай) башҡорт халҡының риүәйәт һәм легендаларын өйрәнеүҙә мөһим бер сығанаҡ итеп ҡарарға хаҡлыбыҙ.

Шулай ҙа тарихи-этнографик әҙәбиәт эсендә һаҡланып ҡалған материалдар араһында төп урынды XVIII–XIX бб. ғалимдарының яҙмалары биләй.

---

[1] Йәйә эсендәге тәүге һан һылтанма яһалған хеҙмәттең был китапта бирелгән «Библиография»лағы рәт һанын, өтөрҙән һуң торғандары унын биттәрен күрһәтә. Нөктәле өтөрҙән һуң килгән һандың тәүгеһе — сығанаҡты, икенсеһе бит һанын күрһәтә.

Конец ознакомительного фрагмента

Уважаемый читатель!

Размещение полного текста данного произведения
невозможно в связи с ограничениями
по IV части ГК РФ

Эту книгу вы можете прочитать в
Оренбургской областной универсальной
научной библиотеке им. Н. К. Крупской

По адресу: г. Оренбург, ул. Советская 20
телефон для справок: (3532) 32-32-26